КОНКУРС — ЭШҠЫУАР / ЧЕЛОВЕК ДЕЛА — Ватандаш

*Гүзәл БАЙҒОТЛИНА*

# Ғаиләлектың кә ерен белһендәр тип...

## Хоккейсы, рәссам, авиатор

...Атай кеше тағы бер ҡабат стеналағы сәғәткә күҙ һалды: ”Их, тәмле-татлы йоҡоларыңды бүлеп, ҡара таң менән тағы уятам һине, улым...” Һаҡ ҡына баланың яурынына ҡағылды: ”Азамат, уян, ашығырға кәрәк”. Шыбырлап өндәшеүҙе көтөп кенә торғандай, һарғылт сәсле көләкәс малай күҙен асып та ебәрҙе — иртән-иртүк тренерына күнекмәләргә йөрөргә ғәҙәтләнгән инде ул. Күнекмәләрҙән һуң Азаматты мәктәп көтә, артабан йәнә тренеры янына барырға кәрәк. Буш ваҡыты юҡ та тиерлек...



*Азамат Рафаэль улы Юлбарыҫов*

Бала сағын иҫенә төшөрөп, Азамат әле шундай һығымтаға килә: шул ваҡыттан һеңгән был ғәҙәттәр рухының сыныҡыуына, үҙ-үҙен ойоштора белеү һәләтенә өйрәнеүгә беренсе нигеҙ булғандыр, күрәһең.

Хоккейға килеүендә атаһының йоғонтоһо ҙур булһа ла, ул үҙе лә бәләкәйҙән сәмлелеге, ҡомарлығы менән айырылып тора (тренер Сидякин төркөмөндә шөғөлләнгән малай 14 йәшендә хатта үҫмерҙәр араһында Башҡортостан чемпионы исеменә лайыҡ була). Юҡ-бар сәбәп табып, атаһы Рафаэль Мирсаяф улы бәләкәй Азаматты гелән гаражға эйәртеп йөрөй. Ҡала янындағы баҡсала йорт һала башлағанда ла уны төҙөләш ығы-зығыһына нисек тә йышыраҡ ҡатнаштырырға тырыша. ”Атайымдың ”мутлығын” яңы саҡ, инде үҙем ике бала атаһы булғас ҡына аңлай башланым, — ти Азамат. — Башта спортҡа, һуңыраҡ техникаға, ”ирҙәр эше”нә ылыҡтырырға тырышҡан ул мине шулай”. Бар ерҙә лә өлгөргән зирәк, отҡор баланың ата-әсәһе ауыл еренә, ундағы туған-тыумасаға һөйөүҙе лә үҫтерергә тырыша. Өфө малайы

тип иҫәпләнһә лә, уға атаһының тыуған яғы — Архангель тарафтары ла, әсәһе Фәғилә Шәүәлиевнаның ғәзиз Күгәрсен яҡтары ла берҙәй яҡын, берҙәй ҡәҙерле була.

Мәктәптән һуң йәш Юлбарыҫов туп-тура Өфө юғары вертолет училищеһына юллана. Физик яҡтан ныҡ сыныҡҡан егеткә хыялындағы уҡыу йортона ингән саҡта, әлбиттә, бер ҡыйынлыҡ та тыумай. 1989 йылда, училище тарҡатылғандан һуң, ул Һарытау училищеһына күсә һәм йыл ярым Ми-8Т вертолетында оса, һуңынан егетте Сызранғә күсерәләр. Әйткәндәй, курсант саҡта Азаматҡа нәҫеленән килгән һүрәт төшөрөү һәләте лә бик ярап ҡала — ул урындағы кафе өсөн барлыҡ һүрәттәрҙе үҙе төшөрә, бүлмәләрҙе биҙәү эшендә ҡатнаша. Училищены тамамлағас, летчик-инструктор булып Дәүләкәндәге вертолет полкында илһамланып эш башлай.

— Ни өсөндөр беҙҙең сығарылышта күптәрҙең инструктор булғылары килмәй ине. Ә миндә нәҫелдән килгән педагог һәләте үҙен һиҙҙерҙе шикелле — был эш менән тәғәйенләнешем икәнен аңланым. Профессиональ күҙлектән ҡарағанда ла, инструкторҙарҙың тәжрибәһе күберәк, белем кимәлдәре юғарыраҡ була, тигән фекерҙәмен.

Шулай итеп, ул курсанттарҙы Ми-2 вертолетында осорға өйрәтә башлай, һуңынан иһә, Өфө юғары вертолет училищеһына күскәс, ундағы йәш-елкенсәкте өйрәтергә тотона. Ә бер нисә йылдан, Өфөләге училище ябылыу сәбәпле, Азамат Юлбарыҫов Һарытау өлкәһенең Пугачев полкына күсергә мәжбүр була. Тырыш, егәрле башҡорт егете 1999 йылда полктың иң шәп летчик-инструкторы тигән исем яулай, ”РФ Хәрби көстәрендәге намыҫлы хеҙмәте өсөн” миҙалы менән бүләкләнә.

Тап Дәүләкәндә йәш авиатор үҙенең буласаҡ кәләше Лүзиә менән таныша. Тәү күрешкәндән ете көн (!) үтер-үтмәҫ ”Ну, а девушки — потом!” тип эре сирттереп йөрөгән егетебеҙ ҡыҙға тәҡдим яһағанын һиҙмәй ҙә ҡала. Ике йылдан йәш ғаиләлә ҡыҙҙары Регина, һуңынан улдары Асҡар тыуа. Юлбарыҫовтар ул йылдарҙа ябай хәрби хеҙмәткәр ғаиләләре күргән барлыҡ ҡыйынлыҡтарҙы — сабыйҙар менән бер туҡтауһыҙ күсенеп йөрөүҙәрҙе, торлаҡһыҙлыҡты, аҡсаһыҙлыҡты һәм башҡа проблемаларҙы үҙ елкәһендә татып өлгөрә. Азаматҡа, әйткәндәй, Мониноларғы академияла юғары хәрби белем алырға ла мөмкинлек тыуа. Әммә армияла перспективалар ҡалмауын, ундағы киләсәгенең бик шикле булыуын аңлап, ғаилә башлығы ул уйынан баш тарта. 2000 йылда Хәрби көстәрҙә тағы ҡыҫҡартыу башлана, сираттағы ойоштороу-штат саралары сиктәрендә Азамат Юлбарыҫов запасҡа ебәрелә. Өфөгә күскәс, айырым фатир тураһында хыялланырға ла ҡыймаған йәштәр дөйөм ятаҡҡа урынлаша. Ғаилә башлығының ул саҡтағы хәлен артыҡ тасуирларға кәрәкмәйҙер ҙә — төшөнкөлөк, өмөтһеҙлек...

Хәҙер нимә эшләргә? Ҡайҙа барып төртөлөргә?

## Тәүәккәлләү

Нәк шул ваҡытта Азаматтың ятаҡтағы ут күршеһе, хеҙмәттәше һәм иң яҡын дуҫы Константин Старков Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары өсөн ҡәбер таштары яһау эшенә тотона. Тәүҙәрәк ул бының менән

шөғөлләнгән эшҡыуарҙарға ябай эшсе булып яллана, аҙағыраҡ иһә айырым предприятие хаҡында уйлай башлай. Һәм 3 — 4 айҙан дуҫын үҙенә саҡыртып ала. Уға тиклем дә үҙаллы эш башлау тураһында уйланған, ләкин быға баҙнат итмәйерәк йөрөгән Азамат был саҡырыуҙы ихлас ҡабул итә.

Алдан уҡ аныҡлап үтергә кәрәк: предприятиеның эшмәкәрлеген һис тә ритуаль хеҙмәтләндереү менән бутарға ярамай. Ул фәҡәт ҡәбер таштары яһау, һәйкәлдәр ҡойоу менән шөғөлләнә.

— Ҡайһы бер кешенең аңында бындай эшмәкәрлеккә ҡарата ниндәйҙер стереотип бар: был, йәнәһе, әллә ни әһәмиәтле булмаған, баҡыйлыҡты, үлемде хәтерләткән эш. Тыуыу үлемһеҙ булмай, үлем — тормоштоң тәбиғи бер күренеше. Шулай булғас, сәйерһенергә, был теманан ҡасырға ярамай, — ти Азамат эшенең үҙенсәлеге хаҡында.

...Осо-ҡырыйы күренмәгән мәшәҡәттәр менән тулы булған тәүге осорҙа егеттәр барыһын да үҙ ҡулы менән эшләй, районлар буйлап йөрөүҙән бушамаған иҫке автомобилде көн аша тигәндәй үҙҙәре йүнәтә, тейәү-бушатыу эштәре лә тулыһынса үҙҙәренең иңенә төшә. Аҡса яғы һәм мөмкинлектәре самалы ғына булыуына ҡарамаҫтан, эш айырмай улар, ҡулдан килгәнен дәртләнеп, кинәнеп атҡара. Тиҙҙән егеттәр тырышлыҡтарының һөҙөмтәһен ғәмәлдә үк тоя башлай: эш даирәләре барлыҡ республикаға тиерлек киңәйә, яңы автомобиль һатып алырға мөмкинлектәре тыуа. Ниһайәт, хәрби хеҙмәткәр булараҡ алған торлаҡ сертификатына үҙҙәренең аҡсаһын өҫтәп, Юлбарыҫовтар фатирлы була. Ә иң мөһиме — был ҡырҡа үҙгәрештәрҙән һуң Азамат ҡабат тормошонан толҡа, йәм таба башлай. "Минеңсә, һәр ир-егет өсөн йәшәү мәғәнәһе — күңелен һалып эшләгән эшендә. Шунһыҙ һин ҡанатһыҙ", — ти ул.

— Тормоштағы һәм эштәге дуҫлығыбыҙҙың төп таянысы — хәрби кешеләр, хеҙмәттәштәр булыуыбыҙҙа. Әрмелә тыуған дуҫлыҡтан да нығыраҡ дуҫлыҡ юҡтыр, — тип инана Азамат. — Был йылдар эсендә бик күптәр менән эшләргә, хеҙмәттәшлек итергә тура килде, тик, ҡыҙғаныска ҡаршы, тел оҫталығы уңғанлыҡты аңлатмай икән...

Ысынлап та, хәрбиҙәрсә фекер йөрөтөргә, принциптарына тоғро булырға өйрәнгән был егеттәрҙе "гражданка"лағы тормошта бик күп тапҡыр төп башына ултыртып киткәндәре була: алдашыу, ике йөҙлөлөк, урлашыу осраҡтары... Эштең ритмына түҙмәгәндәр ҙә күп була. "Ауыҙ бешә-бешә, үҙ хаталарыбыҙҙан һабаҡ алып сынығырға тура килде, — ти әле ул турала геройыбыҙ, көлөмһөрәп. — Хәйер, бындай осраҡта аҡыл нығыраҡ һеңә".

"Илək аша" үтә-үтә, алты йыл эсендә предприятиела иң яуаплы, иң эшһөйәр кешеләр генә ҡалған. Бөгөн унда тәжрибәле рәссамдар, юғары профилдәге эшселәр хеҙмәт итә: Марат Ғәлимханов, Владимир Вербило, Андрей Мясников...

Өс дуҫ, өс авиатор — Азамат Юлбарыҫов, Константин Старков һәм Дмитрий Тараник бергәләшеп етәкләгән предприятие бөгөн Өфө ҡалаһында был өлкәләге иң эре, иң етди предприятиеларҙың береһе булып һанала. Сибай, Белорет, Магнитогорск, Үрге Уфалей, хатта Украина менән араларын нығытып, егеттәр һәйкәлдәр өсөн сифатлы таш килтереү эшен яйға һалған. Унда-бында уҡталып ҡарағандан һуң

иң сифатлы тауарын тәҡдим иткән, бик оператив эшләгән ышаныслы хеҙмәттәштәр таба алғандар.

Ныҡлап аяҡҡа баҫа барған егеттәр, элекке хата-маҙарҙарына ҡарамаҫтан, башҡаларға ярҙам итеү "ғәҙәтен" һис ташламаған: эштәренең айышына дуҫ-иштәрен, таныштарын төшөндөрә. Хәҙер уларҙың күпселеге үҙ ҡалаларында ошондай уҡ йүнәлештә эшләгән ҙур-ҙур предприятиелар ойоштороған. Әйтәйек, Пенза өлкәһенең Сердобск ҡалаһында йәшәүсе дуҫтары асҡан фирма былдай предприятиелар араһында төбәктә иң ҙур, иң ҡеүәтлеләрҙең береһенә әүерелгән. Һамар, Калининград өлкәләрендәге иптәштәре лә бик көслө эшҡыуарҙар булып киткән. Азамат ул дуҫтары хаҡында шул тиклем һөйөнөп, ғорурланып һөйләй — күңеленең йомартлығына, сабыйҙарса ихласлығына тағы бер хайран ҡалырһың...

Әлегә егеттәр һайлап алған ошо юҫыҡтан тайпылырға уйламай, бар маҡсаттары — профессиональлеккә өлгәшеү, юғарыраҡ кимәлгә сығыу.

— Конкуренция көсәйә барғас, йылдан-йыл ҡатмарлыраҡ шарттарҙа эшләргә тура килә. Ләкин әле был ярыш дөрөҫ йүнәлештә бара, — тип иҫәпләй Азамат, — фирмаларҙың күпселеге халыҡҡа күрһәткән хеҙмәтләндереүҙең сифатлыраҡ булыуы, тиҙерәк башҡарылыуы өсөн тырыша. Баҙарҙағы барлыҡ тармаҡтар шығрым тулы, унда үҙ урыныңды табыуы, нығынып алыуы бик ҡыйын. Ҡулды һәр ваҡыт "пульс"та тотмаһаң, һә тигәнсе дистанциянан төшөп ҡалғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың... Шуға ла ҡәбер таштары зауыҡлыраҡ, матурыраҡ итеп эшләнә хәҙер. Кешене йәлеп итеү өсөн ҡыҙыҡлыраҡ варианттар эҙләргә, һәйкәлдәрҙе бер үк төрлө итмәҫкә, мөрәжәғәт иткән кешенең барлыҡ теләктәре һәм талаптарына ярашлы итеп эшләргә тырышабыҙ. Күп клиенттар аҙаҡтан, яҡындарына һәйкәл ҡуйҙыртҡандан һуң, рәхмәт әйтергә тип ҡабат килә. Уларҙың рәхмәте беҙгә ныҡ ҡәҙерле.

## "Мин бөгөн нимә эшләп өлгөрҙөм?"

Кешеләрҙең зауығы, дини ҡараштары һәм мөмкинлектәре төрлө булғанлыҡтан, улар эшләтергә теләгән ҡәбер таштары ла төрлө була, әлбиттә. Кемгәлер мәсет йәки сиркәү, ай, тәре кеүек символдар, йәки медицина, спорт, хәрби хеҙмәт символикаһы кәрәк. Кемдер ташта туған телендәге яҙыуҙы күрергә теләй, кемдер яҙыуҙың ғәрәп графикаһында булыуын үтенә.

Афарин, былдағы егеттәр дөрөҫ тәржемә эшләүгә яуаплы ҡарай — телде яҡшы белгән кешеләргә генә мөрәжәғәт итә. Ғәрәп графикаһындағы яҙмалар буйынса ярҙамлашҡан белгес — Азаматтың ике туған ағаһы, "Ихлас" мәсетендә эшләүсе Булат Юлбарыҫов. Азамат уның аша мосолмандарҙың ҡәбер таштарына бәйле ғөрөф-ғәҙәт тураһында ентекләп белешкән. Билдәле, Исламда ҡәбер ташы һүрәтһеҙ, тәпәш булырға тейеш. Хәйер, хәҙер ундай һәйкәлдәр юҡ тиерлек, әммә төрлө дин кешеләрендә һәм төрлө халыҡта был традицияларҙың төрлөсә булыуы үҙе бер ныҡлы өйрәнәһе мәктәп.

Ә хәҙерге заман тенденциялары ниндәй? Был өлкәлә ниндәйҙер "мода" тураһында һөйләргә мөмкинме? "Етди ҡарағанда, "мода" беҙҙең яҡтарға әле килеп етмәгән, әммә үҙгәрештәр һиҙелә, — ти Азамат. — Һәйкәлдәрҙе әле күбеһенсә аҡ һәм һоро мәрмәрҙән, ҡара, ҡыҙыл, йәшкелт

граниттан эшләтәләр. Форманың төрлөлөгө әллә ни айырылмай. Өфөләге мосолман зыяратында таштан эшләнгән үҙенсәлекле һындар осрай, ләкин ундай композициялар беҙҙә әле бик һирәк. Ә бит тотош сәнғәт өлгөһө тип баһаларлыҡ һәйкәлдәр булырға мөмкин!..”

Шуға ла Азамат яҡын арала Мәскәү һәм башҡа төбәктәргә барып, унда был өлкәлә ниндәй үҙгәрештәр булыуын күреп ҡайтмаҡсы. Ниәте — Новодевичье зыяратындағы кеүек ҡатмарлы композициялар эшләү.

— Һәр кем үҙ өлкәһендә оҫтарырға, үҙ йүнәлешендә камиллашырға ынтылһын ине. Киләсәк — тик профессионалдар ҡулында, — ти ул. — Ҙур түрә булһаң да, ябай эшсе, ябай хеҙмәткәр булып эшләһәң дә, иртәнсәк уянғас, иң беренсе уйың эш тураһында булһын. Йоҡлар алдынан иң һуңғы уйың да шул турала булырға тейеш. ”Мин бөгөн нимә эшләп өлгөрҙөм? Нисек эшләнем? Тағы ла яҡшыраҡ эшләй алыр инемме?” — тип үҙ-үҙеңдән һорарға кәрәк.

## ”Һәр кем үҙ теләгенә ирешә ала”

Үҙ-үҙенә ҡарата ғәйәт талапсан, эшенә ҡарата үтә яуаплы, бер юлы ҡырҡ мәшәҡәтен хәл итеүсе Азамат Юлбарыҫов тәүлектәге 24 сәғәтен дә тик эшенә арнаған кеше булып күҙ алдына баҫа, ахырыһы. Ҡыуанысыбыҙға күрә, хәлдәр улай уҡ түгел икән. Берҙән, геройыбыҙ һаман да яратҡан хоккейын ташламай — эше ни тиклем генә күп булһа ла, аҙнаһына өс тапҡыр эштән һуң Спорт һарайына юллана. Үҙе әйтмешләй, төрлө йәштәге кешеләр, төрлө һөнәр эйәләре менән боҙ майҙансығында сәкәләшеп алыуҙан һуң кире эмоцияларҙы һыпырып алғандай була. Икенсенән, күңелендәге ”Һауаға, бейеккә!..” тигән әмергә буйһоноп, парашют спорты менән даими шөғөлләнә икән. Өҫтәүенә, һунарсы һәм балыҡсы ла. ”Тик кейек аулап ҡайтыуҙан бигерәк, миңә тәбиғәткә яҡынайыу мөмкинлеге мөһим”, — ти ул. Ҡыш етһә, балалар менән көн дә тигәндәй катокка йөрөргә ваҡыт таба. Һүрәт төшөрөү һәләтен дә онотмаған, киләсәктә ял ваҡытын күберәк мольберт артында үткәрергә ниәтләй. Шул уҡ ваҡытта Суровкала һала башлаған ҙур йортондағы эштәрҙе лә онотмай: унда әле биҙәлеш эштәре генә ҡалған. Хәйер, оҫта рәссам өсөн был эшме ни?!.

— Күҙ тейә күрмәһен, хыялдарым тормошҡа аша бара. Сөнки был тормошта һәр кем үҙе теләгәнгә ирешә ала, — ти яңыраҡ бөҙрәхана асыу тураһында хыяллана башлаған Азамат. — Мин үҙемде ҡеүәтле эшҡыуар тип иҫәпләмәйем. Бар теләгем — эшем балаларға мираҫҡа ҡалдырырлыҡ тотороҡло булһын, профессиональ яҡтан үҫкәндән-үҫә барһын.

Балаларына ваҡытты ойоштора белеү, башлаған эште еренә еткереү кеүек һәләттәрҙең орлоғон һалыу теләге менән Азамат ҡыҙын спорт мәктәбенә биргән — Регина гандбол менән етди шөғөлләнә. Асҡар улын иһә 5 йәшлек сағынан уҡ хоккейға йөрөтә башлаған.

— Миңә уларҙың профессиональ спортсы булыу-булмауҙары мөһим түгел, — ти атай кеше. — Иң мөһиме, етеҙ, үткен булыуға өйрәнә башлаһындар. Бәләкәй саҡта спорт аша сыныҡтырылған ихтыяр уларға бик-бик кәрәк буласаҡ, оло тормошта көс бирәсәк. Быны мин үҙ миҫалымда беләм.